УРЫНДАҒЫ БАШЛАНҒЫСТАРҒА ЯРҘАМ ПРОГРАММАҺЫ — ҒӘМӘЛДӘ

# Халыҡ йыйылышы — проектты тормошҡа ашырыуҙың төп этабы

**"Урындағы башланғыстарға ярҙам" программаһы буйынса район ауыл биләмәләрендә тәүге йыйылыштар үткәреү процедураһы башланды.**

"Урындағы башланғыстарға ярҙам" программаһы ауылдарҙа мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелгән. Ауыл халҡы үҙҙәрен борсоған төп проблемаларҙы берҙәм булып билдәләй, уларҙы хәл итеү өсөн проекттарын тәҡдим итә һәм ошо йүнәлештә төрлө саралар үткәрә.

Әлеге ваҡытта районның ауыл биләмәләрендә тәүге йыйылыштар үтә, урындағы халыҡ хәл итергә кәрәкле проблемаларҙы тикшерә. Күптән түгел бындай йыйылыштар Ләмәҙтамаҡ, Ростов, Яңы Мишәр, Әләгәҙ һәм Яңы Яуыш ауыл биләмәләрендә уҙҙы.

Һөләймән ауылында уҙған йыйылышта халыҡ бер нисә проект тәҡдим итте, уларҙың өсәүһе өҫтөнлөклө тип билдәләнде. Ошо көндәрҙә дөйөм йыйылышта актуаль проблема һайлап алынасаҡ. Киләһе йылда ҡатнашыу өсөн һайланасаҡ проектты билдәләү маҡсатында анкета ярҙамында халыҡтан һорау алыу үткәрелгән.

Әләгәҙ ауыл биләмәһендә лә тәүге йыйылыш үтте. Эштәрҙе алып барыуҙы контролдә тотасаҡ, шулай уҡ конкурсҡа әҙерлек буйынса ойоштороу һәм документтар әҙерләү мәсьәләләрен үҙ өҫтөнә аласаҡ инициативалы төркөм һайланды. Мәләкәҫтә өҫтөнлөклө проектты асыҡлау өсөн халыҡтан һорауға яуап алыу дауам итә. Ауыл халҡы әүҙем ҡатнаша, төрлө варианттар тәҡдим итә.

Яңы Мишәр ауыл биләмәһендә ойошма етәкселәре, Совет депутаттары һәм йәмәғәт берләшмәләре рәйестәре менән берлектә ауыл биләмәһе халҡының "Урындағы башланғыстарға ярҙам-2024" программаһында ҡатнашыу мәсьәләһе буйынса ойоштороу ултырышы уҙҙы. Улар бер тауыштан был программала ҡатнашырға ҡарар итте.

Ишәле ауылында йәшәүселәр йыйылыш йомғаҡтары буйынса зыярат биләмәһен төҙөкләндереүҙе планлаштыра.

Яңы Яуыш халҡы ла көнүҙәк проект һайлаған: улар өсөн ауыл мәҙәниәт йортон капиталь ремонтлау алғы планда тора.




Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: республикала 2016 йылдан ғәмәлгә ашырылған "Урындағы башланғыстарға ярҙам" программаһы — реаль эшләүселәрҙең береһе. Ошо маҡсатта республика ҡаҙнаһынан субсидиялар (ауылға 1 миллион һумға тиклем) бүленә. Уны программаның конкурс этабында һайланған ауылдар ала. Программа халыҡ, юридик шәхестәр (бағыусылар) һәм урындағы бюджет ҡатнашлығында берлектә финанслана. Проблеманы билдәләү һәм программаны һайлау буйынса йыйылышта ҡатнашыусылар ни тиклем күберәк булһа, конкурс заявкаһының еңеүгә мөмкинлектәре лә шунса күберәк.

**Ләйсән АБЗАНОВА әҙерләне.**

РӘСМИ

# Байрамдарҙа медицина учреждениеларының эш графигы

**Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Яңы йыл байрамдарында поликлиникаларҙың һәм стационарҙарҙың нисек эшләүе хаҡында һөйләне.**

Республика халҡын медицина ярҙамы менән тәьмин итеү маҡсатында Яңы йыл байрамдарында поликлиникалар штат режимында эшләй.

30 декабрҙән 8 ғинуарға тиклем амбулатория-поликлиника звеноһы көн һайын иртәнге сәғәт 8-ҙән киске сәғәт 5-кә тиклем эшләйәсәк, ә өйгә саҡырыуҙар көндөҙгө 4-кә тиклем ҡабул ителәсәк. Шуны билдәләп үтеү мөһим: табиптар поликлиникала ла, саҡырыусының өйөндә лә препараттар, шулай уҡ ауыртыуҙы баҫҡан дарыу яҙа ала. Был график 30 декабрҙә, 1-6 ғинуарҙа ғәмәлдә була, ә 8 ғинуарҙа — иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 5-кә тиклем.

Бынан тыш, ғинуар айындағы каникулдар осоронда медицина тикшереүе һәм диспансерлаштырыу дауам итә. Төбәк халҡы 7 ғинуарҙан тыш бөтә көндәрҙә поликлиникаларҙың эш сәғәттәрендә үҙ һаулығын тикшерә ала.

# Алкоголь һатыу сикләнә

**Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 3 ғинуарҙан алып 6-һына тиклем республика магазиндары киске сәғәт 5-тән иртәнге 10-ға тиклем алкоголле эсемлектәр һата алмай.**

Йәғни 3, 4 һәм 5 ғинуарҙа иртәнге сәғәт 10-дан киске 5-кә тиклем генә спиртлы эсемлектәр алырға мөмкин. 6 ғинуарҙа бындай сикләү киске сәғәт 5-тән киске 11-гә тиклем ғәмәлдә буласаҡ. Был сикләүҙәр сауҙа нөктәләренә генә ҡағыла, ә бар һәм рестораандарҙа спиртлы эсемлектәр һат